**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**Министерство образования и науки Республики Башкортостан**

**Администрация муниципального района Белорецкий район Республики Башкортостан**

**МОБУ СОШ с.Серменево**

| | | |
|---|---|---|
| **Рассмотрено** | **Согласовано** | **Утверждено** |
| РуководительШМО | Зам. директора по ВР | Директор школы |
| _______Хуснутдинова Л.З | _____Фаткуллина Л.Х | _______Азнабаев Г.Р. |
| Протокол № 1от | Приказ №139 от | Приказ №139 от |
| «28» августа 2025 г. | «29» августа 2025 г. | «29» августа 2025г. |

**Рабочая программа**
начального общего образования
внеурочного учебного курса
**« Я учу башкирский язык »**
для обучающихся
4-б класса

Составитель: Низаметдинова А.В.

## Аңлатма яҙыу

“Башҡорт телен өйрәнәм” түңәрәгенең уҡыу- уҡытыу программаһы “Мәғариф тураһында”ғы законға, “Рәсәй Федерацияһының икенсе быуын Федераль дәүләт хөкүмәт стандарттарына, “Башҡортостан халыҡтары телдәре” законына, 2017/2018 уҡыу йылында дөйөм белем биреү учреждениеларында ҡулланыу өсөн Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән уҡыу әсбаптары исемлегенә,Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡала округы муниципаль мәғариф учреждениеһы “Мостай Кәрим исемендәге 158-се Өфө ҡала Башҡорт гимназияһынының” уҡыу планына таянып эшләнде.

Был документтарҙа милли мәктәптәрҙә туған телде тейешле кимәлдә уҡытыу, уның мөһим проблемалары, заманса уҡытыуҙың бурыстары, йүнәлештәре, юлдары билдәләнгән. Икенсе быуын хөкүмәт стандарттарының талаптарына ярашлы бала башҡорт теле буйынса белем алыу менән бер рәттән яңы йәшәү шарттарына яраҡлы тормош тәжрибәһе тупларға,уңышлы уҡыусы һәм эшмәкәр шәхес сифаттарына эйә булырға тейеш.

Түңәрәктә яңы технологиялар ( үҫтереүсе уҡытыу, проблемалы, проектлау) һәм уйындар ҡулланыла.

## Уҡыу предметына дөйөм характеристика.

«Башҡорт телен өйрәнәм» түңәрәгендә башҡорт теле предметы ярҙамында түбәндәге үҫеш юлдары тормошҡа ашырыла:

- Предмет кимәлендә белемгә эйә булыу;
- Уҡыу техникаһын үҫтереү, текстарҙы анализлау юлдарына эйә булыу;
- Яҙма һәм һөйләү телмәренә эйә булыу;
- Тел тураһында белем алыу һәм системалаштырыу;
- Орфография һәм пунктуацияны өйрәнеү;
- Башҡорт теленең тәрбиәүи потенциалын ҡулланыу;

## Программаның йөкмәткеһе

Программа һөйләшеү, телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу һәм үҫтереүҙе күҙ уңында тотҡан тематиканы, уҡыу өсөн әҙәби әҫәрҙәрҙе, орфоэпия һәм орфография, элементар грамматик һәм пунктуацион материалдарҙы үҙ эсенә ала.

1. Фонетика. «Өн һәм хәреф» темаһы буйынса алған белемдәрҙе системаға килтереү. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Нәҙек һәм ҡалын һүҙҙәр, уларҙы тамғалау. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Ижек. Һүҙҙе ижеккә бүлеү. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү.

2. Һүҙ башында э хәрефе. Һүҙ уртаһында е хәрефе. Й хәрефенең яҙылышы. Йо, йө, йе, йы, йә ҡушымсалары. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә е, ё, ю,я хәреф-тамғалары. У-ү хәрефле һүҙҙәр.

3. Һүҙ. Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр. Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. Предметтың хәрәкәтен (эшен) белдергән һүҙҙәр. *Һәм, менән, да-дә, ҙа-ҙә, ла-лә. та-тә. ғына-генә, ҡына-кенә* ярҙамсы һүҙҙәре.
4. Һөйләм. Һорау һөйләм . Өндәү һөйләм. Хәбәр һөйләм. О-ө хәрефле һүҙҙәр. Һөйләмдең сиктәрен билдәләү.

5. Орфография һәм пунктуация. Кешенең исем-фамилияларын, хайуан ҡушаматтарын һәм ер-һыу атамаларын ҙур хәреф менән яҙыу. Ярҙамсы һүҙҙәрҙең айырым яҙылыуы.

6. Универсаль укыу эш төрҙәре. Уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәнеү. Текстарҙы аңлы һәм тасуири укыу.

7. Хәрефтәрҙе айырым һәм бер-береһе менән тоташтырып таҙа яҙыу. һүҙ һәм һөйләмдәрҙе, текстарҙы күсереп яҙыу. Ишеткәнде яҙыу (диктант). Уҡытыусы ҡуйған һорауға тулы һәм асыҡ яуап биреү, дәрестә иғтибар менән тыңлау. Уҡытыусы ҡушҡанды аңларға өйрәнеү. Үҙ-ара һөйләшеү (диалог) ҡороу. Тел күренештәрен күҙәтеү, сағыштырыу, анализлау һәм һығымта яһау. Үҙ аллы белем алырға өйрәнеү. Уҡытыусы ярҙамында маҡсат ҡуйыу. Эште планлаштырыу һәм уның буйынса эшләү. Тикшереү. Эште баһалау.

8. Тыуған төйәк, үҙебеҙ йәшәгән урын тураһында әңгәмәләр үткәреү, әҫәрҙәр укыу. Яҙыусылар менән осрашыуҙар үткәреү.

9. Шиғыр, хикәйә яҙыу күнекмәләренә өйрәтеү. Ғилми-тикшеренү эштәренә әҙерлек, проект эштәре башҡарыу.Төрлө конкурстарҙа ҡатнашыуға әҙерлек.

**Уҡыу йылы аҙағына укыусыларҙың әҙерлек кимәленә талаптар**

**Шәхси үҫеш кимәле.**

«Башҡорт телен өйрәнәбеҙ» түңәрәген үткәргәндә , укыусыны шәхси үҫеш кимәлен үҫтереү бурыстарын ҡуя:

- телдең һәм телмәрҙең кешеләр тормошондағы әһәмиәтен аңлау;

- тексты эмоциональ ҡабул итеү, үҙеңдең хис-тойғоларыңды белдереү;

- кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлау, уртаҡлашыу, бүлешеү;
- уҡылған әҫәрҙең геройҙарына һәм уларҙың эшенә ҡарата үҙеңдең мөнәсәбәтеңде белдереү.

**Метапредмет кимәле**
Ойоштороу эшмәкәрлеге:

- уҡытыусы ярҙамында эшмәкәрлек маҡсатын билдәләү;
- дәрестә эш барышын һөйләп барыу;
- дәреслек материалы менән эшләү барышында уйҙы, фаразды әйтеү;
- уҡытыусы тәкдим иткән план буйынса эшләү;
- коллектив төҙөлгән план буйынса эшләү.

**Танып белеү эшмәкәрлеге**:
- дәреслектең, матур яҙыу өлгөләренең айышына төшөнөү (тышы, йөкмәткеһе, шартлы билдәләре);
- дәреслектән, текстан, иллюстрацияларҙан һорауға яуап табыу;
- бергәләп йәки үҙ аллы башҡарған эш буйынса һығымта яһай белеү;
- уҡылған текстың йөкмәткеһен һөйләү.

**Аралашыу эшмәкәрлеге:**
- фекереңде телдән формалаштырыу;
- кешенең телмәрен тыңлау һәм аңлау;
- тыңлай белеүҙең уңышлы аралашыуға шарт булыуын үҙләштереү;

- тексты тасуири уҡыу һәм йөкмәткеһен һөйләү;
- уҡытыусы һәм класташтар менән берлектә тәртип ҡағиҙәләре һәм уларҙы үтәү тураһында килешеү.

**Предмет үҙләштереү кимәле:**

- тексты һөйләмдәр теҙмәһенән айыра белеү;
- бөтөн һүҙҙәр менән аңлы, дөрөҫ уҡыу;
- тексты ентекле һөйләй белеү;
- хикәйә төҙөү;
- һүҙҙең өндәрен атау, ижеккә бүлеү, өндәр һәм хәрефтәр һанын билдәләү. Дөрөҫ баҫым ҡуйыу, хәреф-өн анализы яһау;
- һөйләмде, кешенең исемен һәм фамилияһын баш хәреф менән яҙыу;
- һөйләм аҙағында тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып яҙыу;
- баҫма тексты күсереп яҙыу, диктант итеп яҙыу;
- тамырҙаш һүҙҙәрҙең тамырын табыу.

**Универсаль- уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыуҙы индергән планлаштырылған һөҙөмтәләр.**

1. **Шәхси сифаттарҙы үҫтереү:**

-үҙ аллы эш итергә , белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарарға;

-атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә , уҡыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә ҡарата ихтирамлы булырға;

- мәктәп йыһаздарына, уҡыу-әсбаптарына һаҡсыл булырға;

- Тыуған илде яратырға, ерҙе, телде һаҡларға;

- һаулыҡты нығытырға;

- ҡунаҡта, кинола йәки экскурсияла һәм башҡа йәмәғәт урындарында әҙәпле булырға, файҙалы ял итергә;

- кеше менән аралышыу этикетын үҙләштерергә.

*2.* **Предмет буйынса белем алыу:**
- һүҙҙең өн моделенә ярашлы һүҙ уйлап табырға;

- һүҙҙең өлөштәрен (тамыр һәм ялғау , яһаусы ялғау һәм яһалма һүҙ) айырырға.

- тамырҙаш һүҙҙәрҙе танырға, уларҙы башҡа оҡшаш һүҙҙәрҙән айырырға;

- тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәр һәм хәрефтәр,парлы-парһыҙ, яңғырау-һаңғырау, сонор тартынҡы өндәр, сиратлашып килеүсе тартынҡылар тураһында һөйләй белергә;

-һүҙгә фонетик анализ яһай белергә;

-ҡушма һүҙҙәрҙе танырға, уларҙың дөрөҫ яҙылышын аңлата белергә;

-үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе танырға һәм уларға дөрөҫ ялғау ҡуша белергә тейеш;

-һүҙ төркөмдәрен (предмет атамаһын, билдәһен, хәрәкәтен белдергән һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙе ) таба белергә ;

-һөйләмдең баш киҫәктәрен айыра белергә;

-сюжетлы һүрәт , һорауҙар, терәк һүҙҙәр ярҙамында хикәйә, әкиәт ижад итергә.

*3.* **Универсаль укыу эш төрҙәрен үҙләштеү:**
- үҙ аллы белем алырға , мәғлүмәт йыйырға һәм уларҙы ҡуллана белергә;

-дәрес барышында уҡытыусы менән берлектә эшләргә: дәрескә маҡсат ҡуйырға һәм уны дәрес һуҙымында күҙ уңында тота белергә һәм тормошҡа ашырырға, эште дөрөҫ планлаштырырға, эҙләнеү эше алып барырға;

-эҙләнеү эше һөҙөмтәләре буйынса презентация эшләргә;

-тиҫтерҙәре һәм оло кешеләр менән итәғәтле һөйләшергә, кеше менән мөнәсәбәт ҡороу оҫталығын үҙләштерергә;

-эшләгән эштәрен дөрөҫ баһаларға һәм кәрәк икән төҙәтмәләр индерергә.

**<u>Көйләүсе универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:</u>**
- Тыуған илгә, уның теленә, мәҙәниәтенә, тарихына һөйөү һәм хөрмәт*;*
- төрлө ситуацияларҙа йәштәштәре һәм ололар менән хеҙмәттәшлек күнекмәһе, конфликтлы һәм бәхәсле ситуацияларҙан сығыу юлын белеү;- толерантлыҡ;
- башҡа кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлай һәм билдәләй белеү, уртаҡлаша алыу;

- матурлыҡ тойғоһо – тәбиғәт матурлығын күрә белеү, йәнле тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш үҙеңдең һәм әйләнә-тирәңдәге кешеләрҙең ҡылыҡтарына дөрөҫ баһа биреү;

- мораль тәртип ҡағиҙәләрен көйләүсеэтик тойғолар – намыҫлана, ояла белеү, ғәйебеңде танып ғәфү үтенеү.

**<u>Танып-белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:</u>**
- телмәр ситуацияһына ярашлы үҙеңдең фекереңде телдән әйтеү;

- төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте таба белеү (тотош текст, иллюстрация, схема, таблица)*;*
-мәғлүмәтте бер форманан икенсе формаға үҙгәртә белеү (план, схема, таблица төҙөү)*;*
-һүҙлектәр, белешмә материал менән менән файҙалана белеү*;*
-анализлай һәм синтезлай белеү*;*
-сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәрен урынлаштыра белеү*;*
-фекерләй белеү*;*
**<u>Коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:</u>**
- һөйләү һәм яҙма формала яуап бирә белеү*;*
-телмәр сараларын төрлө коммуникатив мәсьәләләрҙе сисеүҙә дөрөҫ ҡулланыу;

- телмәрҙең диалогик һәм монологик формаларын яҡшы белеү;

-үҙеңдең фекереңде нигеҙләй белеү һәм дөрөҫ итеп башҡаларға еткерә алыу;
-башҡаларҙы ла ишетә һәм тыңлай белеү, уларҙың ҡараштарын аңларға тырышыу, кәрәк булғанда үҙеңдең ҡарашыңды төҙәтә белеү;
-дөйөм эшмәкәрлек барышында ҡарар ҡабул итә белеү;
-һорауҙар бирә белеү.

**4-се класс:** бөтәһе 34 сәғәт, аҙнаһына 1 сәғәт.

**Тематик планлаштырыу.**

| № | Дәрес темаһы | Сәғәт һаны | Үткәреү ваҡыты | |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Ни өсөн республикабыҙ “Башҡортостан” тип атала? | 1 | 2.09 | |
| 2 | Нимә ул “республика”? | 1 | 09.09 | |
| 3 | 11 октябрь – Башҡортостан Республикаһының тыуған көнө. | 1 | 16.09 | |
| 4 | “Урал” йыры – башҡорт халыҡ гимны. | 1 | 23.09 | |
| 5 | Башҡортостандың Дәүләт гимны. | 1 | 30.09 | |
| 6 | Башҡортостан Республикаһы гимны авторы Ф.Иҙрисов. | 1 | 7.10 | |
| **Республиканың баш ҡалаһы – Өфө. (18 сәғәт)** | | | | |
| 7 | Ҡала тарихынан ҡыҙыҡлы ваҡиғалар. | 1 | 14.10 | |
| 8 | Бөгөнгө Өфө. | 1 | 21.10 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 9 | Салауат батырға һәйкәл. | 1 | 11.11 | |
| 10 | Дуҫлыҡ монументы. | 1 | 18.11 | |
| 11 | Башҡортостан Республикаһының Зәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһы. | 1 | 25.11 | |
| 12 | Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры. | 1 | 02.12 | |
| 13 | Ҡурсаҡ театры. | 1 | 9.12 | |
| 14 | Өфөнөң иҫтәлекле урындары.<br><br>Өфөлә йәшәүсе халыҡтар.<br><br>Өфөлә низәр етештерелә? | 1 | 16.12 | |
| **Республика байрамдары. (4 сәғәт)** | | | | |
| 15 | Башҡортостан Республикаһының рәсми байрамдары. | 1 | 23.12 | |
| 16 | Район һәм ауыл кимәлендә үткәрелгән байрамдар.<br><br>Мәктәптә үткәрелә торған байрамдар.<br><br>Класс байрамдары. | 1 | 30.12 | |
| **Тел тураһында. (8 сәғәт)** | | | | |
| 17 | Ике ҡәҙерлә тойғо. | 1 | 13.01 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 18 | Тел – аралашыу ҡоралы. | 1 | 20.01 | |
| 19 | Халыҡ-ара аралашыу телдәре. | 1 | 27.01 | |
| 20 | Сит телдәрҙе өйрәнеү тураһында. | 1 | 3.02 | |
| **Беҙ һәм башҡалар. (16 сәғәт)** | | | | |
| 21 | Дуҫлыҡ байрамы. | 1 | 10.02 | |
| 22 | Рус халҡы көнкүреше. | 1 | 17.02 | |
| 23 | Татар халҡы көнкүреше. | 1 | 24.02 | |
| 24 | Мари халҡы көнкүреше. | 1 | 3.03 | |
| 25 | Сыуаш халҡы көнкүреше. | 1 | 10.03 | |
| 26 | Мордва халҡы көнкүреше. | 1 | 17.03 | |
| 27 | Удмурт халҡы көнкүреше. | 1 | 24.03 | |
| 28 | Рәсәйҙә йәшәүсе милләттәр. | 1 | 7.04 | |
| **Халыктар дуҫлығы.** | | | | |
| 29 | Вафа Әхмәҙуллин.<br><br>Даян Мурзин. | 1 | 14.04 | |
| **Сәнғәт оҫталарыбыҙ – донъя сәхнәләрендә. (8 сәғәт)** | | | | |
| 30 | Әҙәби бәйләнештәребеҙ. | 1 | 21.04 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 31 | Бәлә-ҡаза килгәндә үҙ-ара ярҙам. | 1 | 28.04 | |
| 32 | Мин – үҙ илемдең тулы хоҡуҡлы гражданы. | 1 | 5.05 | |
| 33 | Мин – үҙ илемдең тулы хоҡуҡлы гражданы. | 1 | 12.05<br>19.05 | |
| 34 | Башкортостанда йәй. | 1 | 26.05 | |